*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# ТЫНЫС ТОРМОШ ЯУГИРЫ



*Һаулыктың оло байлык икәнлегеен һәр кем белә. Әммә белеү бер эш, шу иҫтә тотоп, ошо байлыктың кәҙерен белеп йәшәү ҙә кәрәк. Тормош булғас, төрлө хәлдәр була: өҙә баҫып йөрөгән кешенең дә көтмәгәндә табиб кулына юлығыуы мөмкин. Тап шул мәлдә табибтың табиблығың, кешелеклеген иҫтә нык тояһың. Һинең артабанғы яҙмышың уның кулында. Башкортостанда, Өфөлә ундай табибтар байтак. Марс Тимербулат улы Юлдашев тап ошондай кеше. Ғүмерен балалар хирургияһына арнаған талантлы табиб бына 40 йылға якын Гиппократ антына тоғро хеҙмәт итә. Ул билдәле табиб кына түгел, аҫҙем йәмәғәт эшмәкәре лә. Өфөләге фенол һәләкәте осоронда халык һаулығы өсөн айырыуса борсолған, һәләкәт әҙемтәләрен бөтөрөү өсөн иң аҫҙем көрәшеүсе булды Марс Юлдашев. Ғүмер тигән текә тауҙың түбәһенә артылғас та тынғылык белмәй ул: ошо юлдан уҙенең артынан эйәргән әҙәрмәндәргә, юлсыларға ярҙам кулы һуҙа-һуҙа, алға атлай. Кайһы районға ғына сакырһалар ҙа кире какмай, барып операциялар эшләргә, йәш табибтарҙы оҫта хирург булыу серҙәренә өйрәтә.*

Марс Тимербулат улы Стәрлебаш төбәгендә үҫһә лә Бишбүләк районының Аҙнай ауылында тыуған. Шуға ла ике район халҡы ла уны яҡташ итеп иҫәпләй. Баласағы атаһының тыуған ауылы Ҡаранайҙа үтә. Атаһы һуғыш яланынан иҫән-һау ҡайтҡас, уларҙың ғаиләләре Стәрлебашта төпләнә. Ҡаранайҙа мәктәпкә уҡырға төшкән Марс артабан Стәрлебаштағы 1-се һәм 2-се урта мәктәптәрҙә белем ала.

— Тыуған төйәгем — Стәрлебаш менән мине күп нәмә бәйләй, — ти профессор Марс Тимербулат улы Юлдашев. — Уның гүзәл тәбиғәте күңел түренә ҡунған. Дуҫтарым, туғандарым да шунда. Атайым, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Тимербулат Миңлеғәли улы ла, әсәйем, Гөлшәмсә Мырҙахан ҡыҙы ла ошонда ерләнгәндәр. Бар ғүмерҙәрен мәктәпкә, балалар тәрбиәләүгә биргән атай-әсәйемә әле лә, үҙем олатай булғас та, рәхмәтем сикһеҙ.

...Бәләкәйҙән үк булмаһа ла үҙен белгәндән бирле табиб булырға ниәтләй Марс Тимербулат улы. Шуға күрә 1956 йылда, Стәрлебаштағы 2-се урта мәктәпте тамамлағас та, Башҡорт дәүләт медицина институтына уҡырға инә. 1962 йылда дауалау факультетын уңышлы тамамлаған йәш табиб Яҡут АССР-ына, алыҫ Себер яҡтарына хирург булып эшкә юллана. Институтта алған белемен 3 йыл ошо төбәктә кеше һаулығын һаҡлауға арнай. Әммә артабан уҡыу, белемен камиллаштырыу, башҡаларҙы ла өйрәтә алырлыҡ табиб булыу теләге тынғылыҡ бирмәй уға. Шуға күрә 1965 йылда Башҡортостанға кире ҡайтып, Башҡорт дәүләт медицина институты

эргәһендәге аспирантураға уҡырға инә һәм медицина фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжәгә диссертация яҡлай.

Артабан бар ғүмерен балалар һаулығын һаҡлауға, талиптарҙы табиб һөнәре серҙәренә төшөнөргә ярҙам итеүгә арнай Марс Тимербулат улы Юлдашев. Юғары квалификациялы балалар хирургы булараҡ утыҙ йылға яҡын эшмәкәрлеге осоронда меңәрләгән баланың ғүмерен һаҡлап ҡалған ул. Өфөләге республика балалар клиник дауаханаһында ғына түгел, Стәрлебаш, Миәкә райондары, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүеҙ, Күмертау һәм башҡа ҡалаларҙың дауаханаларында ла балалар хирургияһы буйынса ҙур ярҙам күрһәтә М.Т.Юлдашев.

Дауалау һәм педагогик эшмәкәрлеге менән бер рәттән Марс Тимербулат улы ғилми-тикшеренеү эштәре менән уңышлы шөғөлләнә. 1990 йылда ул «Балаларҙың эренле( диструктив, пневмония) үпкә шешен хирургик ысыулдар һәм интенсив терапия ярҙамында дауалауҙың клиник — экспериментал һәм патогенетик нигеҙҙәре» тигән темаға медицина фәндәре докторы ғилми дәрәжәһенә диссертация яҡлай. Был фәнни эш ғалим-табибтың күп йыллыҡ эш һөҙөмтәһе: балаларҙың үпкә шеше кеүек ауыр ауырыуға мөмкин тиклем иртәрәк диагноз ҡуйыу, уны хирургик ысул менән дауалауҙың яңы төрҙәрен табыу буйынса өҙлөкһөҙ тикшеренеүҙәр алып бара профессор М.Т.Юлдашев. Тырышлыҡ бушҡа китмәй, һуңғы йылдарҙа был ауырыу һөҙөмтәһендә үлем осраҡтарын ҡырҡа кәметеүгә өлгәшелде, диагностика һәм дауалауҙың өр-яңы алымдары дауалау ғәмәленә индерелде. Марс Тимербулат улы 100-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт авторы. Башҡортостан Республикаһы халҡы араһында медицина, хирургия буйынса белемде әүҙем пропагандалаусы ла ул. Йыш ҡына радио һәм телевидение аша сығыш яһай, уның ғилми-популяр мәҡәләләрен «Башҡортостан ҡыҙы» журналы, «Башҡортостан», « Республика Башҡортостан» гәзиттәрендә уҡырға мөмкин. М.Т.Юлдашев уйлап тапҡан һәм ғәмәлгә ашырған 10-дан ашыу уйлап табыу эше һәм рационализаторлыҡ тәҡдиме лә дауалау өлкәһендә лайыҡлы урын алды, республикала ғына түгел, унан ситтә лә киң таралды һәм юғары баһаланды.

1987 йылдан алып әлеге көнгәсә профессор М.Т.Юлдашев Башҡорт дәүләт медицина университетының табибтарҙың белемен камиллаштырыу факультетында педиатрия һәм балалар хирургияһы оператив клиникаһын һәм хирургия кафедраһын етәкләй. Өфө ҡалаһының күп профилле 17-се клиник дауаханаһы базаһындағы факультетта үҙенең бай ғилми тәжрибәһен һәм тәрән теоретик белемен Башҡортостан Республикаһының төрлө районы дарынан, ҡалаларынан килгән табибтарға уртаҡлаша. 17-се дауахананың йәш хирургтары уның етәкселегендә ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара, докторанттар һәм аспирантар төрлө эксперименттар үткәрә. Профессор М.Т.Юлдашев хирургия, балалар хирургияһы һәм морфологияһы буйынса кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертациялары яҡлау буйынса медицина университетының Ғилми советы ағзаһы буларак та күп эш алып бара. Һиҙгер һәм иғтибарлы табиб йәштәрҙең ихлас кәңәшсеһе. Талиптар ҙа, дауаханалағы ауырыуҙар ҙа ысын күңелдән хөрмәт итәләр уны. Марс Тимербулат улы етәкселегендә эшләнгән операциялар һәр саҡ уңышлығы үтә, ыңғай һөҙөмтәләр бирә, ауырыуҙарҙа өмөт, ышаныс уята.

Медицина фәндәре докторы, профессор М.Т.Юлдашев «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған врачы» тигән абруйлы исемдә йөрөтә.

Талантлы табиб Марс Тимербулат улы менән Флүрә Мәжит ҡыҙы, күптәргә өлгө булырлыҡ татыу ғаилә ҡороп, ике ҡыҙ, бер ул тәрбиәләп үҫтергәндәр. Өлкән ҡыҙҙары Лира атаһы юлынан киткән: медицина институтын тамамлап, тиҫтә йылдан ашыу балалар табибы булып эшләй. Индира иһә әсәһенең һөнәрен үҙ иткән һәм, Өфө авиация-техник университетының иҡтисад бүлеген тамамлап, банк хеҙмәткәре вазифаһын атҡара. Улдары Салауат та, «атанан күргән уҡ юнған» тигән мәҡәлде иҫтә тотоп, хирург һөнәрен һайлаған.Уҙған йыл медицина фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертация яҡланы, әле башҡалабыҙҙың 8-се дауаханаһында урология бүлегендә үҙе асҡан яңы ысыулдар менән дауалай ул. 2000 йылда Салауат Юлдашев Башҡортостан Республикаһы хирургтары ассоциацияһының йәш хирургтары араһында «Иң яҡшы ғилми эш өсөн» премия яуланы.

Марс Тимербулат улы тәжрибәле хирург, талиптарҙың, йәш табибтарҙың ихлас остазы, ғалим булыу менән бергә республикабыҙҙың ижтимағи һәм сәйәси тормошонда ла әүҙем ҡатнаша. Бөтә донъя башҡорттарының I Ҡоролтайы делегаты бына 6 йыл инде ҡоролтай Башҡарма комитеты ағзаһы булараҡ уның ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуға ҙур өлөш индерә.

Марс Тимербулат улы беҙҙең анкета һорауҙарына шундай яуаптар бирҙе:

1. Табиб һәм заман. Уларҙың бәйләнеше хаҡында фәкерегеҙ.

—Ниндәй генә заман булмаһын, табиб һәр саҡ табиб булып ҡала. Ауыр саҡта ярҙамға килергә әҙер тороуы менән абруйлы ул. Әммә әлеге заманда күңелде ҡыра. Был иһә дауалау кимәленә тәъҫир итмәй ҡалмай.

2. Хәҙерге заман йәштәре хаҡында фекерегеҙ...

— Хәҙерге йәштәрҙең күбеһе эш һөймәй, емертеп эшләп йөрөрлөк егеттәр, ҡыҙҙар ата-әсә елкәһендә йәшәргә ярата. Эсергә яратыуҙары, тәмәке тартыуҙары табибтарҙың эш хаҡы түбән булыуы күңелде ҡыра. Иң мөһиме, күбеһенең күңелендә милли хис-тойғо, милли рух юҡ. Киләсәк бит улар ҡулында.

3. Ҡайҙа ял итергә яратаһығыҙ?

— Мин булмышым менән ауылдыҡы. Шуға ла ауылда ял итеүҙе өҫтөн күрәм. Бесән сабырға, урманда йөрөргә, емеш-еләк йыйырға ярата́м. Ауыл кешеләре менән ихлас һөйләшеп алыу ҙа әллә күпме уйҙарға һала. Ҡыҙғаныуҡа ҡаршы, атай-әсәй үлеп ҡалғас, һирәгерәк ҡайтырға тура килә.

4.Башҡорт әҙәбиәте, сәнғәтенә ҡарата фекерегеҙ...

—Бәләкәйҙән әҙәбиәтте, йыр сәнғәтен һөйөп үҫтем. Табиб һөнәрен һайлаһам да һәр яңы әҙәби әҫәрҙе уҡып барырға тырышам. Китап нәшриәтендә сыҡҡан яңы китаптарҙы, айырыуса шиғри йыйынтыҡтарҙы һатып алып уҡыйым.Үҙебеҙҙең яҙыусылар, артистар, йырсыларҙың күбеһе менән яҡындан танышмын, уларҙың ижадын күҙәтеп, уңыштары, табыштары өсөн ҡыуанам. Үҙем дә йырларға ярата́м. Айырыуса башҡорт халыҡ йырҙарын үҙ итәм. «Сибай», «Ҡаһым түрә», «Илсе Ғайса», «Сәлимәкәй», «Шәүрә» кеүек башҡорт классикаһы өлгөләрен яратып башҡарам. Композиторҙар яҙған заман йырҙарынан «Үтте лә китте йәшлегем» (Р.Ғарипов һүҙҙәре, Р.Сәхәүетдинова музыкаһы) «Аҡҡош күле» (Г.Юнысова һүҙҙәре) Р.Сәхәүетдинова музыкаһы)һ.б. күңелемде елкендерә.

Марс Тимербулат улы әле лә үҙ халҡы өсөн янып, дәртләнеп эшләй, илһамланып йәшәй, ижад итә. Афарин, гелән шулай булһын!